*Рәүеф НАСИРОВ*

# Сура батыр иләндә

«Сура батыр һунарҙан йөрөп килгәс бик арыған да, һыҙмаһын үҙе менән бергә йөрөй торған юлдашы Тарауыл ҡартҡа биреп, уны һунарға ебәргән. Ул йөрөп ҡайтҡансы үҙе ял итергә булған... Мин шунан Сураның хәлен беләйем тип, уға табан атлаһам, Мәсем хан менән Аҡбулат, йоҡоһонан яңы уянған Сураны, шатланып, үлтерергә торалар... Бисәһен (Һомайҙы) саҡырып алайыҡ та, халыҡҡа, ауырып үлде, тип хәбәр таратырға ант иттереп күмдерәйек, тип һөйләштеләр...

Ай, Сура батыр, Уралымды бирмәйенсә Аҡбулат бей менән Мәсем хан менән бик күп йылдар һуғышып килгән кеше ине. Ул бер саҡта ир-ат Уралдың һыуында балыҡтай йөҙә, урманында ҡоштай һайрай ине. Батыр әрәм булды шул, – тине ҡарт».

*(Башкирский народный эпос. «Акбузат».Гл. редакция Восточной лит-ры. М., 1977.)*

Кеше ни эҙләһә, шуны табыр, тиҙәр. Ләкин ҡай ваҡыт улай булмай ҙа сыға: бер нәмәне эҙләйһең, икенсе нәмәгә барып юлығаһың.

Һуңғы осорҙа был юлдарҙың авторына башҡорт халҡының ҙур ғына өлөшө һаналған барын-табын ырыуы кешеләренең 1735—37 йылдарҙа Йосоп батыр Арыҡов етәкселегендәге ҙур ихтилалын өйрәнергә тура килде. Эҙләнеү башта барын ырыуына ҡараған Туңғатар, Ҡужай, Ҡорама ауылдары тирәһендәрәк кенә барҙы. Әммә һөҙөмтә булманы тиерлек. Артабан география киңәйҙе, иғтибар борон заманда ҡарабарын-табындарҙың төп йәшәү урыны булған Силәбе өлкәһенең Уйск районына күсте. Иң оло маҡсат — талантлы ойоштороусы, Башҡортостандың көнсығыш, төньяҡкөнсығыш тарафтарында меңдәрсә ҡәүемде азатлыҡ хәрәкәтенә әйҙәй алған һәм Ырымбур губернаһы санауниктарын, Екатеринбург түрәләрен ҡурҡыуға һалған Йосоп батырҙың тыуған урынын билдәләп ҡуйыу ине. Тарихи документтарҙы өйрәнгәндә, 1735—1737 йылдарҙағы ваҡиғалар: Шадрин өйәҙенең Теченск (Тыныс) слободаһынан А. Тевкелев тарафынан Үрге Яйыҡҡа тип ебәрелгән 600 илауын ҡамауға алыу ҙа, уны ҡотҡарырға килгән В. Арсеньев полкына ҡаршы сығып, уны кире ҡыуып ҡайтарып ебәреү ҙә, артабан ҡыҫым көсәйгәс, һуғышты туҡтатып торабыҙмы, әллә дауам иттерәбеҙме, тип, кәңәш ҡороу ҙа – хәҙерге Учалы районының төньяҡ өлөшөндә булған Йосоп Арыҡов етәкселегендәге башҡорттарҙың хәрәкәт иткән ерҙәре лә, башлыса, Мейәс, Ҡундырау, Сыбаркүл тирәләренә тап килә, Туңғатар, Ҡужай, Кәрим ауылдары кешеләренең исемдәре лә шул ерҙәрҙә барған ваҡиғалар уртаһында осрай. Бына ошо факттарға таянып, Арыҡовтың баш ставкаһы ла барын-табын ырыуы биләмәләренең Сыбаркүл яғына тартымыраҡ өлөшөндә булырға тейеш, тигән һығымта яһала.

Һәм ошолай, Й. Арыҡовты башта Туңғатар менән сиктәш Уйск эргәһендә, унан Мейәс яғында эҙләгән арала, йәки һис көтмәгәндә, бер яңылыҡҡа барып юлығылды. Уға Иманғол ауылында тыуып, хәҙер Учалы ҡалаһында мәктәп директоры булып эшләгән тарихсы Дамир Әхмәтйәнов сәбәпсе булды.

– Йосоп Арыҡовты әллә ҡайҙан эҙләп йөрөйһө түгел, ул Иманғолда тыуған дабаһа, – тине ул.

– Нисек инде Иманғолда? Учалы эргәһендәге Иманғолдамы?

– Эйе. Был хаҡта Үрнәк апай Ғабдрахманова район гәзитендә лә яҙып сыҡты. Элекке уҡытыусы. Беләһегеҙҙер?... Икенсенән, был фаразды тикшерер өсөн, Уйск районындағы Әмин ауылы шәжәрәһен ҡарап сығырға ине. Шәжәрә Әмин ауылы

уҡытыусыһы Марс Дәүләтшинда һаҡлана. Мин һорап ҡарағайным да, алып булманы. Ул документта бик кәрәкле мәғлүмәттәр табып булыр ине, тип уйлайым.

– Әминдең бында ни ҡыҫылышы бар?

– Әмин менән Иманғолда ҡәрҙәш кешеләр йәшәй. Әмингә иманғолдар барып нигеҙ һалған.

Шаҡ ҡатырлыҡ яңылыҡ ине был: аҫтындағын алты ай эҙләгән һымаҡ килеп сыға түгелме һуң? Ә бер ҡараһаң, аптырарлыҡ нимә бар? Тарихи сығанаҡтарға ҡарағанда, Учалы районының ҡап уртаһындағы мәшһүр күлдәр – барындарҙың балыҡ тотоп, йән аҫырар урындары, хәҙер типтәр, мишәр ауылдары ҡунаҡлаған тигеҙлектәр уларҙың көтөүлектәре булған. Быға башҡорт восстаниеларынан һуң ситтән килгән типтәр старшиналарының Иҫәт провинцияһы Канцелярияһына башҡорт «бурҙары»ның «буш» ятып ҡалған ерҙәрен һорап яҙған ғаризалары дәлил. Ошо аҫаба ерҙәрҙе властарҙың арзан хаҡҡа ғына һатып ебәреүе, ә аҙағыраҡ бушлай таратыуы был төбәк ҡәүемдәре тормошона ҙур үҙгәрештәр килтерә. Яңылыҡтар башҡорт ауылы Ташкисеү һәм уға ҡушылып киткән Иманғол яҙмышында ла сағылыш таба. Шулай булғас, Йосоп Арыҡовтың ысынлап та Иманғолдоҡо тип раҫлауҙарына ышанырға күп нәмә лә кәрәкмәй.

Беҙ был йомаҡты асыҡлап ҡуйыу өсөн гәзиттә мәҡәлә баҫтырған һәм әле Бәләкәй Учалы ауылында йәшәгән Үрнәк апай Ғабдрахманова менән осраштыҡ һәм унан:

– Шулай ҙа һеҙ Арыҡовтың Иманғол кешеһе икәнен нимәгә таянып әйтәһегеҙ? – тип һораныҡ.

– Иманғолда борон Йосоп тигән батыр булған, ул беҙҙең нәҫел кешеһе, – тине апай. – Бала саҡта мин ололарҙан уның фамилияһын һорағаным бар. Ниңәлер шыбырҙап ҡына «Арыҡов» тип әйттеләр. Ҡысҡырып әйтергә ҡурҡҡандарҙыр, тием.

Иманғолға юлландыҡ. Ауылдың абруйлы аҡһаҡалдары Йосоптоң үҙенең ҙур ғаиләһе менән бер аҙ ситтәрәк, башҡаларҙан айырымыраҡ, өсмө-дүртме йорт биләп, ауылдың ҡайһы тирәһендәрәк йәшәгәнен күрһәтте. Хужалығы ныҡлы ҡойма менән уратып алынып, артҡы яҡтан да бейек таш стена күтәрелгән булған. Ә ҡойма ашаһында ниндәйҙер ҡораллы әҙәмдәр йәшәгән, халыҡҡа бигүк күренмәгәндәр. Йәйге-көҙгө эштәрҙә ҡатнашҡандар, ләкин ҡараңғы төшкәс, аҙбарҙан тура йылғаға төшөп, һыу кисеп, ҡуйы ҡарағас үҫкән тауға артылып, ҡайҙалыр китеп-килеп йөрөгәндәр. Кем булған улар? Ни менән мәшғүл булғандар? Әллә батырлыҡ эшләп йөрөгәндәр, әллә юлбаҫарлыҡ иткәндәр – быны берәү ҙә әйтә алмай.

Эйе, Йосоп тигән кеше булған Иманғолда. Атаһы – Исмәғил. Нәҫел ағастары түбәндәгесә: башта – Көсәп, унан – Көсәлләп, Ҡөҙрәмәт, Мөсәлләп. Уның улының исеме билдәһеҙ. Унан – Исмәғил килә. Исмәғилдең улы – Йосоп. Йосоптоң ике улы була: өлкәне – Абдрахман, кескәйе – Юныс. Абдрахмандан һуңғыһы – тағы билдәһеҙ. Унан һуң – Ғәбдрәхим. Ғәбдрәхимдән – Үрнәк апай Ғабдрахманова үҙе.

– Беҙҙең нәҫелдә ҡырғыҙ ҡаны бар, – ти Үрнәк апай. – Йосоп олатай ҡырғыҙ ханының ҡыҙын алған. Шуға ла өлкән улы, Абдрахман, ҡаҙаҡтар һымаҡ, эйәр өҫтөндә үҫкән. Балалары ла ҡырғыҙға оҡшап тора. Беҙҙең балаларға, мәҫәлән, Магнитогорскиға барырға тура килһә, һин ҡырғыҙ балаһы, тип бәйләнә торғайнылар.

Иманғолдағы Йосоптоң Йосоп Арыҡов булыуын иҫбатларға тырышып һәм Абдрахман тармағына ҡарағанда Юныс тармағы тулыраҡ тип, апай Юныс нәҫелен һанай: Юныс – унан ҡала Ғәбделнасир, шунан – Ғәбделхан. Ғәбделхан улы – Жәүҙәт.

Ләкин, был нәҫелдең ҡайһы тармағын ғына ҡарама, ғалимдарҙың кәңәше буйынса һәр быуын араһын 30-35 йылға самалап иҫәпләгәндә лә, Иманғол Йособо Йосоп Арыҡов йәшәгән осорға барып етмәй. Тимәк, ул Арыҡов түгел. Шулай ҙа хәтер һандығына һалып ҡуйыйыҡ: Иманғол Йособо ла ниндәйҙер серле тарихҡа ишара яһаған һәм махсус өйрәнеүҙе талап иткән бер шәхес булып тора һымаҡ.

Ә иҫкә алынған Иманғол менән Уйск районының Әмин ауылы уртаҡлығын белеү өсөн шулай уҡ боронғо ҡомартҡыны – Марс Дәүләтшин биреп ебәргән нәҫел ағасын ентекләп ҡарап, тикшереп сығыу зарар итмәҫ: егермеләгән биттән торған был үҙенсәлекле халыҡ документында йөҙҙәрсә кешенең ҡан һәм рухи бәйләнештәре сағылыш таба, ул ғына ла түгел, унда ниндәйҙер кимәлдә тотош башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының үткәненә, бер-береһе менән тығыҙ аралашып йәшәүенә лә ишара яһала, хатта уларҙың Сура батыр тураһындағы эпостарына ла барып ялғана.

Сура батыр хаҡындағы риүәйәткә элегерәк күренекле ғалимыбыҙ Ғ. Б. Хөсәйенов тә иғтибар иткән булып сыҡты. Ул «Шәжәрәләр» тигән хеҙмәтендә (Башҡорт әҙәбиәте тарихы. I том. Урта быуаттар осоро. Өфө, Башҡ. китап нәшриәте. 1990) Әмин, Иманғол нәҫел ағасына ҡағылып, «Сура батыр» эпосы мотивын анализлай һәм Көнсығышты өйрәнеү институтының Ленинград бүлексәһе Ҡулъяҙмалар фондында һаҡланған ошо шәжәрәне килтерә. Ғалим «Сура батыр» эпосының ярайһы уҡ ҙур булыуын, уның ҡаҙаҡ, нуғай, Ҡырым татарҙары тарихына бәйләнешле икәнен билдәләй.

Санкт-Петербургта һаҡланған ошо эпос варианты менән Әмин ауылында табылған шәжәрә тексы араһында айырмалар булһа ла, уларҙың нигеҙҙәре бер үк.

«Ата-бабаларыбыҙ һөйләүе буйынса, ҡаҙаҡ халҡының Жағыл бай нәҫеленән булған Нүрәк мирза, Бохара иленән күсеп килгән, Салҡаркүл тирәһенә урынлашҡан, – тип башлана риүәйәт. – Нүрәк мирза бик бай булған, уның туғыҙ туғай йылҡыһы йөрөгән.

Бер ваҡыт Нүрәк йылҡыһына бер арыҫлан эйәләшкән: һәр көн бер йылҡыны тартып ашап китер булған. Был афәткә Нүрәк мирза һис рәнйемәгән. Йылҡыһының ҡыуылып, туҙып йөрөүен лайыҡ күрмәй, тағы күпме ашар икән тип, үҙ ихтыяры менән бер һимеҙ йылҡыны арыҫлан ята торған ергә бәйләп ҡуя башлаған. Арыҫлан шуны тартып ашар булған.

Бер көн ҡолон ваҡытында бүре тартып уңалмаған һимеҙ бейәне алып бәйләгәндәр. Арыҫлан да уға теймәгән. Был хәлде күргәс, Нүрәк бай, «ҡасҡырҙан (бүренән) ҡалған һыныҡты арыҫлан еймәҫ» тип, мәҡәл әйткән. Һуңыраҡ икенсе бер байталды ағасҡа бәйләгәс, арыҫлан шуны ашаған да үҙ юлына киткән. Шунан һуң йылҡылар иҫән ҡалған...»

«...Салҡар күле буйында йәйләп ғүмер кисергәндә Нүрәк мирзаның Тайҙүлә исемле ҡатынынан бер ир балаһы тыуып, Сура тип исем ҡушалар. Бер нисә йыл үткәс, йәнә бер ул тыуып, исемен Ширин тип ҡуялар. Был ике бала Нүрәк байҙың фәрәүәнселек илә булған тормошонда киңлектә наҙ-ниғмәт эшендә ғорыҡ булып үҫтеләр. Халыҡ ҡашында ай менән көндәй ҡәҙерле булдылар. Үҙҙәре һүҙгә оҫта, эшкә етеҙ инеләр...»

Артабан риүәйәттә XIV-XV быуаттарҙа татар хандарының рус кенәздәре менән һуғышыуы, иптәше Ҡолонсаҡ батыр менән Ҡазанға ярҙамға барыуы, бергәләп рус ғәскәрен ҡыуып ебәреүҙәре, Ҡазан ханының Сураны батыр итеп иғлан итеүе, үҙенә йәмәғәт итеп татар ҡыҙын алыуы һәм уларҙан ир бала тыуыуы бәйән ителә. «Ҡазан шәһәрендә Оҙондар нәҫеле – шул Сура батыр нәҫеленән, имеш».

«Ҡазан шәһәрендә тамам тыныслыҡ урынлашҡас, Сура батыр һуғыштан иҫән ҡалған егеттәре илә үҙ иленә – Салҡар күле буйына ҡайтырға сыҡты. Иленә етмәҫ борон иптәше Ҡолонсаҡты хәбәрсе итеп алға ебәрҙе. Ҡолонсаҡ батыр, илгә етеп, халыҡҡа: «Сура батыр булды, Ҡазанды рустарҙан ҡотҡарҙы», – тип һөйөнөс хәбәр таратты.

Ниһайәт, Сура батыр үҙенә эйәргән ғәскәре илә таң ҡараңғыһында ҡайтып етте. Өйөнә килгәс, утауынан бер таҙа йәш егет сыҡҡанын күреп һәм ҡатынын ҡыҙғанып: «Һай, был өйгә сит кеше баш булған икән, башын сабып өҙәм!» – тип, ҡынынан сығарып ҡылысын күтәрҙе. Шул ваҡыт бер туған энеһе Ширин үҙен таныт-ҡас, әһә, ғәйрәтем кире ҡайтмаһын, тип, ҡылысын кире ҡынына тыҡмайынса, менеп килгән атының билен сабып өҙгән».

Был хәлдәр ҡайҙа булғаны хаҡында тарихи мәғлүмәттәр юҡ, тип өҫтәй билдәһеҙ автор һәм артабан Ҡазандың тағы рустар тарафынан баҫып алыныуын, Ҡазан ханлығы бөтөрөлөп, Мәскәү кенәзе Иван Грозныйҙың татарҙарға бик ҡаты мөғәмәлә күрһәтеүе, уларҙы урыҫлаштыра башлауы, мосолман диненә ҡаршы булыуы тураһында яҙа.

«Иван Грозныйҙың шундай ҡаты мөғәмәләһенән ҡурҡып, Сура батыр үҙенә эйәргән халҡы менән рус ғәскәрҙәренең ҡамауынан сығып, Уралдың ҡалын урманына килеп боҫҡан, – ти ул. – Һәм Сура батырҙың нәҫеле үлеп бөткән тип, хәлҡыяр һалдырған. Үҙе бик ҡаты ауырып китеп, бер йылдан һуң вафат була...»

Әмин шәжәрәһендәге риүәйәт башҡорттарҙың «Аҡбуҙат» эпосын хәтерләтә. Унда Сура батырҙың тормошо ғына сағылдырылмай. Географик атамаларҙың – Уралтау, унан күҙләп сыҡҡан Яйыҡ, Иҙел, Уй йылғаларының, Илтабан, Аҡбулат ауылдарының (хәҙерге Рысай) исемдәренең ҡабатланыуы ла ҙур ҡыҙыҡһыныу уята һәм, «Сура батыр» әҫәренең тап ошо ерлектә тыуыуы мөмкин, тигән фекер уята.

Санкт-Петербург фондында һаҡланған шәжәрәлә – уны тәүләп матбуғатҡа сығарған ғалим исеме менән Ғ. Хөсәйенов шәжәрәһе тип атайыҡ – һәм Т. Рәхмәтуллин төҙөгән шәжәрәлә килтерелгән исемдәр, ер-һыу атамаларында айырма ҙур түгел:

| Ғ. Хөсәйеновта | Т. Рәхмәтуллинда | «Аҡбуҙат» эпосында |
|---|---|---|
| Жағылбай | Жағыл бай | — |
| Улы Нарыҡбай | Нүрек бай | Урал батыр |
| Уның улы Сура | Сура | Сура |
| Инәһе Тәнисула | Тайдула | Һомай |
| Уйыл йылғаһы | Уй йылғаһы | Ағиҙел, Яйыҡ йылғалары |
| Чалпар күле | Салҡар күле | Шүлгәнкүл |

Риүәйәтте дауам иттерәйек: «Сура батырҙан Йәнбәт тыуған, Йәнбәттән – Нүркә, Нүркәнән – Биксура, Биксуранан – Ғосман...» Ғосман йәки Усман. «Ғосман Дағстан иленә барып, күп йылдар дингилем уҡып, мулла булып ҡайтҡан. Шул заманда Силәбе һәм Үрге Яйыҡ араһында оло юл буйында ултырған Илтабан иленә – Өссапан (Степан) улына килеп һыйынған. Үҙенә ҡараған ғаиләһе илә күсеп килеп, Илтабан түрә хозурында мулла булып ғүмер иткән...» Балалары булып, бер улының исеме Иманғол булған. Иманғол, атаһы Ғосман мулланан инсе алып, Илтабан ауылынан ситкә күсеп ултырған. Уның янына һәр төрлө халыҡ йыйылып, Иманғол ауылы тип исем алды. Хәҙерге көн Учалы районында Иманғол ауылы шул».
Иманғолдоң ике ҡатынынан ун ике ул донъяға килгән. Оло ҡатындан тыуғандар: Ғәбделғафар, Ғәбделәссәләм, Ғабдулла, Монасип, Ғәбделмәжит, Ғәбделғафур».
Иҫкәрмә: бында Иманғол балаларының алтыһы ғына күрһәтелгән, башҡалары, бәлки, икенсе бисәһенән булып, аҙағыраҡ теркәлгәндер. Нисек кенә булмаһын, риүәйәткә ингәндәренән һәм перепистән үткәндәренән йәки Ә. Әсфәндиәров китабында булғандарынан күптәренең бер-береһенә тап килеүе беҙгә мөһим. Беҙҙе бында легенда геройҙарының тора-бара ысынбарлыҡтағы тәғәйен нәҫел кешеләренә килеп тоташыуы ғәжәпләндерә. Рәхмәтуллин риүәйәте буйынса, Сура батырҙан һуң өс быуын аша ғына донъяға Усман тыуған. Артабан уның нәҫел тармағы Ә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» (Кн. I. Уфа, Китап. 1997. 62-се бит) тигән китабында күренә: Усман – уның улы Иманғол. Иманғолдоң ике улы була: Абдулсәләм һәм Әбдрәшит. Абдулсәләм 8 малайға тормош бирә: Ниғмәтулла, Зөлҡәрнәй, Абдразаҡ, Әбдрәхим һәм тағы 4 малайға. Уларҙың балалары араһында беҙ Ярмулла, Кәлимулла, Сәфәрғәли, Муллағәли, Аллаяр, Зәйнелбәшир исемдәрен күрәбеҙ. Беҙгә Муллағәли тигәне ҡыҙыҡлы: унан Иманғол ауылында тыуған Социалистик Хеҙмәт Геройы, атаҡлы экскаваторсы, баһадир кәүҙәле Рамазан Муллағәли улы Ниғмәтуллин шул нәҫел ебен дауам иттереүсе түгелме?

Ә риүәйәттә телгә алынған «Илтабан түрә – тарихта бик билдәле шәхес. Ул – Илтабан Степанов (Өссапан). 1735 йылдың көҙөндә Барын-Табын волосы старшинаһы Йосоп Арыҡов, башҡорттарҙы восстаниеға күтәреп, Үрге Яйыҡ нығытмаһындағы гарнизонға аҙыҡ-түлек ылауҙарын үткәрмәҫкә тырышып һуғышҡанда, И. Степанов уға ҡаршы сыға һәм үҙе йыйған команда менән ылауҙарҙы оҙатып бара. Был хаҡта регуляр ғәскәр етәксеһе прапорщик Гладышевтың 1735 йылдың ноябрендә Екатеринбургҡа В.Н. Татищевҡа яҙған рапортынан да уҡып белергә мөмкин. Рапорт «Себер даруғаһы башҡорттарының аҙыҡ-түлек ылауын Ырымбурға ебәрмәҫкә тырышыуына яһаҡ татары Илтабан Степановтың ҡаршы тороуы» тип атала (документ үҙгәртмәйенсә бирелә).

«Доношение.

Сего ноября 26 числа Сибирской дороги дер. Тюбуку[1] ясашных татар сотник Илтабан да выборной ясашных же татар Алмет Бикметов в команде моей доношением объявил: послан де я, ясашный татарин сотник Илтабан Степанов от господина прапорщика Гладышева в разные деревни по чуваш для посылки провождения провианту, а от себя я послал команды своей выборные деревни Короболки чувашенина Алмета Бикметова, которому сказали Сибирской дороги Куваканской

[1] Тюбук – Кубяк, недалеко от дер. Имангулово.

волости дер. Тимамбетовой[1], что де Сибирской дороги Кудейской волости, Трукменские, Тюбеляцкие[2] волостей башкирцы збирались на господина полковника Алексея Ивановича Тевкелева, как он ехал из Теченской слободы, токмо де не напустили затем, что встретили башкирцы и мещеряки довольное число. А ныне де все конечно збираются вышеописанные волости башкирцы, что как отпустится провиант в Оренбурга не допустят, також не токмо оной Тамамбет, но и других деревень башкирцы сказывают про сие новое число. Да я же, сотник Илтабан посылаю команды своей деревни Тюбук Юсупа Васильева в разные чувашские деревни по чуваш для провождения провианту до Оренбурга. Ездил в Айлинскую волость к башкирцу Кунакбаю Минкову, который Кунакбай посланному моему сказал, что де ты обьяви сотнику своему, дабы ехали с провиантом со всякою осторожностию – собираются башкирцы всех волостей Сибирской дороги не пропустить провиант».

(Материалы по ист. БАССР. 1735-1736 гг. ф.3, оп. 13, ед.хр. 38, с. 14.)

Документтағы ҡайһы бер волостарҙың һәм ауылдарҙың исемдәре боҙоп күрһәтелгән, әммә һүҙҙең Илтабан—Златоуст—Ҡоншаҡ юлы буйындағы ауылдар тураһында барыуында бер ниндәй ҙә шик юҡ.

Ылауҙар хәҙерге Учалы районының Ҡужай ауылынан алыҫ түгел Нәрәле тауы ҡыҫығында һәм артабан Кинйәкәй һаҙлығы эргәһендә бикләнеп ҡалғас, В.Н. Татищев 1735 йылдың 28 декабрендә, ылауҙы (600 йөк) башҡорт боласыларынан ҡурсалауҙа ярҙам һорап, башҡорт старшиналарына һәм руханиҙарына мөрәжәғәт итә, бында ла Илтабан Степанов командаһы ярҙамға килә. Полковник А.Н. Арсеньев етәкселегендәге рус ғәскәренә мылтыҡ менән ҡоралланған һәм атҡа атланған 1200 крәҫтиән килеп ҡушыла.

Билдәле булыуынса, XVIII быуат урталарында башҡорт ихтилалдары баҫтырыла, был күтәрелештәрҙең үҙәге булған барын-табын ауылдарына үрт һалына, «буш ҡалған» ерҙәргә сит халыҡтар килеп урынлаша. Бында, волость үҙәге Асыуҙынан «12 саҡырым алыҫлыҡта Иманғол (Ташкисеү) ултыра, — ти профессор Ә. Әсфәндиәров. – Ауылға беренсе булып килеүсе Иманғол Усмановҡа 1811 йылда 76 йәш була». Шәжәрәлә әйтелгәндәргә бик тап килә был. Иманғол ауылында тыуған хеҙмәт ветераны Ж. Х. Насиров та быны ни ти: «Ҡарттарҙың һөйләүенсә, беҙҙең район элек Ҡара Табын волосына ҡараған. Иманғолдар Әминдән килгән. Уларҙы ни өсөндөр «ҡыпсыҡтар» (ҡыпсаҡтар түгел) тип атағандар. Ауылға Усманов Иманғол нигеҙ һалған. 1744-1747 йылдарҙа була был». Ә. Әсфәндиәров Әмин ауылының барлыҡҡа килеүен иһә 1743 йыл тип билдәләй. Тимәк, ике ауылға ла бер үк ваҡытта, башҡорт восстаниеларынан һуң, ағай-энеләре аралашып бөткән нәҫелдәр тарафынан нигеҙ һалынған. Берәүҙәрҙең: «Иманғол – әминдәрҙән», икенселәрҙең: «Әмин – иманғолдарҙан башланған», тиеүҙәре һәм ер атамаларының ҡабатланыуы, оҡшашлығы ла шунан киләләр.

Шәжәрә артабан ни һөйләй: «Иманғолдан тыуған 12 ул мал аҫырап көн күргән. Мал йәйләү өсөн Йәнәшкүл[3] буйына килеп, Иманғол ауылынан йәйләп, ҡышлау өсөн Ташкисеү[4] ауылына ҡайта торған булғандар.

Инде туранан-тура Әмин хаҡында. «Ата-бабаларыбыҙҙың әйтеүе буйынса, 1746 йылдың яҙында аҡ буран сығып, Аҡбулат[5] ауылынан урта хәлле Ибраһим ҡарттың ҡышҡы тибендә өйөрөгән йылҡыһы ел ыңғайына сығып китмеш. Көндәр йылынып, ер-һыу кипкәс, Ибраһим ҡарттың улы Әмин егет юғалған йылҡыны Олотау тигән ергә килеп тапмыш. Олотауҙың өңөрөндә тибеneп ятҡан йылҡылары яҙғы ҡауын ҡойған, алама тайҙар ат булған, быуаҙ бейәләр ҡолонлаған. Әлһәсүл, бөтөн йылҡы имен ҡышлаған. Һуңынан Әмин егет яҡшылап ҡараған. Ер бик мөнәббәт, уңайлы. Уй һыуының буйында шәп болонлоҡ, урманында ағаслыҡ, тауында ташлыҡ, һыуында балыҡ, ҡырында һәр төрлө тиреле йәнлек булғанын күреп, көн күрер өсөн Аҡбулаттан, яҡшы ҡола ат табып, йәйләүгә шундаҡ күсеп килергә ҡарар ҡуйған.

[1] Тимамбетово – Татлимбетово.
[2] Тюбеляцкая волость – Кубалякская волость.
[3] Йәнәшкүл – йә Асыуҙы, йә хәҙер инде тау тоҡомдары менән күмелгән Юшалы күҙҙә тотолалыр.
[4] Ташкисеү – Иманғол ауылының бер өлөшө.
[5] Аҡбулат – хәҙерге Рысай ауылы.

Табылған йылҡыларҙы шунда ҡалдырып, Аҡбулатҡа ҡайтҡас, күргән ерҙе, һыуҙы һөйләп, кәңәшләшеп, Әмин егет үҙе, өс энеһе: Хәлиулла, Ғәбдрәшит, Ғәбделжәлилдәр менән Олотау буйына күсеп килмештәр. Йәнәшкүл буйында йәйләп ултырған Иманғол балалары менән күрше булып ҡунаҡлашып татыу ғүмер уҙҙырғандар. Ниһайәт, кәңәш итеп, ике йәйләү бергә йыйылып, бер урынға ҡышлау һалырға кәңәш беркеткәндәр. Урталыҡ урын итеп хәҙерге Әмин ауылы урынын билдәләгәндәр.

Ҡышлауҙы, элек Әмин егет килеп, Шишмә тауы түбәһенә һалған. Шуның өсөн уға нәсихәт бирелеп, «Әмин ауылы» тип атағандар. Иманғол балалары араһында, ҡышлауҙы шул Йәнәшкүл буйына һалайыҡ, Әмингә ҡушылмайыҡ, тиеүселәр булһа ла, Сөнжелмәжит был ултырған Йәнәшкүл тирәһе ауыл булып ултырырға лайыҡ түгел, Троицк – Верхнеуральск тракты юл өҫтө булғанға вә был был ер бала-сағаға тынғыһыҙ булыр, тигән, һәм әминдәр менән булған кәңәш буйынса, хәҙерге Мәжит тауының төньяҡ битенә 1747 йыл Иманғол балалары ҡышлау һалғандар. Шул ваҡыттан инде ауылды икегә бүлеп, юғары яҡты – Әмин яғы, түбән осто Ташкисеү яҡ тип йөрөтәләр...»

Артабан һүҙ нисек ер беркетеүҙәре хаҡында бара. «Ауылда старшина булып торған Әмин башта Екатеринбургҡа бара, ер планы эшләтеп алып ҡайта (эт тиреһенә), ләкин 1838 йылда янғын сығып, ер планы һәм «межевая книга» юҡҡа сыға. Ә уға тиклем Ырымбур губернаторы Неплюев, башҡорт менән ҡаҙаҡ халҡы берләшеп, батша хөкүмәтенә ҡаршы восстание сығармаһын тип, Ырымбур менән Екатеринбург араһына 7 урынға крепость ҡороу билдәләй, ҡарауыл ҡуя. Халыҡ араһында тыныслыҡ урынлашып, 1847 йылда был ерҙәргә казак ғәскәрҙәре хужа булып алғас, казак булмаған халыҡтарҙы ҡыуалар. Күмләк (Кумляк), Ҡуңғырат, Мостай, Тупай, Лапа ауылдары казак булмайбыҙ тип, ялан яғына күсеп, Бакайкүл, Бурылайғыр, Иманғол исемле ауылдарҙа мещан булып ғүмер итәләр. Күмләк һәм Лапа башҡорттарының бәғзеләре 12 саҡырым түбән күсеп, казачий поселок булып ултыра. Башлыҡ кешеләре Мәһәҙи исемле булған өсөн, Мәһәҙи тип, йәғни Мәһәҙи ауылы тип исем алды. Башҡорттарҙы ҡыуғас, буш ҡалған урындарға Бузулук, Самара һәм Өфө яғынан рустар килеп, Күмләк һәм Лапа ауылдарының мәсеттәренә ут төртөп яндыра. Үҙҙәре, Лапинское һәм Кумлякские тип исемләнеп, был ерҙәргә хужа булып ала».

Шәжәрәне төҙөүсе Рәхмәтуллин Тимерша Әхмәтшәриф улы һәм китапты табып, уны күсереүсе Дәүләтшин Марс Шайкамал улы үҙҙәренең яҙмаһында Әмин ауылында булған түрәләр тураһында мәғлүмәттәр биреп китә: «Әүәл, крәҫтиән ваҡытта ташкисеүле Ғәбделвахит хажи Ғәбделғафаров, унан һуң Юлмөхәмәт Хәлиуллин, Мөхәмәтша Батыршин старшина булып торған. Казачийға күскәс, Ғәбделғафур Хөсәйен улы, артабан Иманҡара Сәфәр улы, Зарай Ғәләй улы приказной итеп тәғәйенләнә. Поселкала атаман вазифаһы индерелгәс, был вазифаны 1871 йылда Хазим Сиражетдинов, 1872-1873 йылдарҙа Әхмәтханбәли Зәйнәғәбетдин улы, 1874-1878 йй. – Сөнәғәтулла Зәйнетдинов, 1879 й. – Динмөхәммәт Юлмөхәмәтов, 1880-1882 йй. – Хөсәйен Батыршин, 1883 й. – Зәйнетдин Зәйнәғәбетдинов, 1882-1885 йй. – Ситдыҡ Дәүләтшин, 1886-1894 йй. – тоташ 9 йыл – Уйылдан Сиражетдинов атаман булған һ.б. Поселканың иң һуңғы атаманы – Ғәбделрахман Абдуллин (1909-12 йй.)».

Үрҙә әйтелгәнсә, Силәбе өлкәһендәге Әминдең Учалы районындағы башҡа типтәр ауылдары менән дә үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булыуы төҫмөрләнә. Профессор Ә. Әсфәндиәров, мәсәлән, Иманғолдан тыш, әминдәрҙең Ахун, Өргөн, Рысай (элекке исеме Аҡбулат) ауылдарына килеп аралашып китеүен дә теркәгән. Һәм, киреһенсә, Рәхмәтуллин үҙенең шәжәрәһендә Әмингә күсеүселәрҙе яҙып үтә. «Әмин ауылы ултырғас, ун йылдан һуң Учалы күле янынан Ишмәт тигән дачанан бер туған Шәмир менән Зәбир күсеп килгән, уларҙың Әмин, Зәйнетдин, Вәли исемле улдары булған», – ти. Шулай уҡ Өргөндән Батырша, Рахманғол, Ҡылмырҙа тигән улдары менән Аҙнаш бай ҙа Әмингә күсенә, ләкин рустар килеп, казаклыҡты ҡабул итмәгәндәрҙе ҡыуғас, Рахманғол, казак булмайым тип, ялан яғына, Яңы Әмингә сығып китә. Бында Ҡарҡынбай ише ҡаҙаҡтарҙың килеүе лә теркәлгән. Ҡарҡынбай, Иманғол ейәне Фәтхулланың ҡыҙын алып, ошонда йәшәй.